*Зөһрә* АЛТЫНБАЕВА



# БЕЙЕ, БЕЙЕ, ЗӨЛФИӘ

Донъяла һәр кемдең үҙ юлы, үҙ яҙмышы, үҙ йондоҙо була. Таланттар хаҡында ғәҙәттә: «Булыр бала бишектән», тиҙәр. Сөнки бәғзе берәү бишектә үк илап-йырлап ҡыуандыра. Икенсеһе иһә аяҡ-ҡулдарын биләүҙән ысҡындырыу менән талпына башлай, бына-бына торор ҙа бейеп китер һымаҡ. Зөлфиә лә, моғайын, шулай булғандыр. Сөнки бар булмышы бейеү бит уның: күҙе, ҡашы, ҡара сәс толомдары, нескә биле, тилбер бармаҡлы нәфис ҡулдары һәм арыу-талыуҙы белмәҫ аяҡтары бейер өсөн генә яратылған.

БАССР-ҙың атҡаҙанған, Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисткаһы Зөлфиә Ҡудашеваны белмәгән, уны урамда күреп танымаған, бейеүҙәрен ҡарап һоҡланмаған кеше юҡтыр. Әйҙәгеҙ, булмаһа, уны сәхнә йондоҙлоғона илткән һуҡмаҡтарҙан беҙ ҙә үтәйек.

Зөлфиә Сибай ҡалаһында тыуып үҫкән. Ул заманда русса уҡыған кешегә тормошта еңелерәк булыуын күрепмелер, әсәһе Зөлфиәне Сибай ҡалаһындағы 7-се рус мәктәбенә уҡырға бирә. Киләсәктә ҡыҙына шул арҡала, йәғни, башҡортса уҡымағанлыҡтан байтаҡ ыҙа сигергә тура килерен белмәй ине шул әсәһе.

Артабан яҙмыш елдәре уны Өфөгә алып килә. Бик тә бейеүсе булыу теләге тартһа ла, туғандары был һөнәрҙе етди түгел тип иҫәпләй, һәм уны 1-се Өфө педагогия училищеһына уҡырға инергә күндерәләр. Унда дүрт йыл уҡып, «балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе» тигән һөнәр алып сыға Зөлфиә һәм тыуған ҡалаһы Сибайға эшкә ҡайта.

Әммә бейер өсөн тыуған аяҡтары сәхнәгә саҡыра. Әле 6 йәшлек сағында уҡ бейеү иленә аяҡ баҫҡан Зөлфиә киләсәк тормошон бейеүһеҙ күҙ алдына ла килтермәй.

Тәүге уҡытыусыһы — хәҙер инде танылған композитор, Башҡортостандың халыҡ артисткаһы Роза Сәхәүетдиноваға бик рәхмәтле Зөлфиә. Сөнки тәүге бейеү серҙәренә ул төшөндөрә, Зөлфиәгә «Бишбармаҡ»ты өйрәтә. Тап ошо бейеү менән Зөлфиә Арыҫланова (ул саҡтағы фамилияһы) Сибай ҡалаһында үткәрелгән үҙешмәкәрлек конкурсында еңеүгә өлгәшә һәм уны өлкәндәр менән бергә Магнитогорск ҡалаһына телевизион тапшырыуға саҡыралар.

1975 йылдың авгусында бейеүсе бәхетен һынарға тип Зөлфиә Өфөгә юллана. Филармонияла үткәрелгән конкурсҡа 4 ҡыҙ килгән икән. Уларҙың икәүһен генә ҡабул итәләр, береһе — Зөлфиә. Әммә ҡыҙҙар теләгәнсә бейеү ансамбленә түгел, эстрада бейеүсеһе итеп алалар уларҙы.

— Эстрада бейеүсеһе булһа ни, миңә тик бейергә генә булһын. Шатланып риза булдым, — тип хәтерләй Зөлфиә. — Тәүге остазым, уҡытыусым Хазина Мағазова булыуына әле лә ҡыуанып бөтә алмайым. Бигерәк иғтибарлы, ихлас һәм дәртле кеше ине. Беренсе бейеүҙе лә ул өйрәтте. Зөлфиә Закирова менән икебеҙ өсөн «Игеҙәктәр» тигән бейеү ҡуйҙы етәксебеҙ. Тамашасылар бик йылы ҡабул итә торғайны был бейеүҙе. Артабан беҙ, ике Зөлфиә, «Ҡара-ҡаршы» тигән бейеүҙе өйрәндек. Уны беҙҙең өсөн филология фәндәре кандидаты, этнограф, Башҡортостандың атҡаҙанған артисткаһы Лидия Нагаева ҡуйғайны.

Артабан бейеү сәнғәтен һөйөүселәр Зөлфиәләр башҡарған «Йәшлек»те лә ҡыуанып ҡарай. 1977 йылда был дуэт эстрада артистарының VI Бөтә Рәсәй конкурсында ҡатнаша һәм Рәсәй Мәҙәниәт министрлығының Маҡтау грамотаһына лайыҡ була. 1978 йылда Зөлфиәне Ф.Ғәскәров исемендәге халыҡ бейеүҙәре дәүләт ансамбленә саҡыралар. Ансамбль менән Зөлфиә Ҡудашева 1979 йылда Чехословакияла гастролдә булып ҡайта.

1980 йылда Зөлфиә филармонияның Фәриҙә Ҡудашева һәм Бәхти Ғайсин етәкләгән эстрада бригадаһына эшкә күсә.

Ансамблдән китеүенең сәбәбе лә ыңғай — буласаҡ тормош иптәше Рөстәм Ҡудашев тап ошо ансамблдә эшләй. Бәхетле яҙмыш уларҙы сәхнәлә осраштыра һәм ҡауыштыра — 1980 йылда Зөлфиә менән Рөстәм өйләнешә.

— Рөстәм үҙе бейемәһә лә минең менән бергә бейегән кеүек. Һәр хәрәкәтемде, һәр фиғелемде тойоп, күреп, төҙәтеп тора. Бейеүҙәремдең һәр береһенә көйҙө лә ул әҙерләне. Уның талантлы музыкант булыуы миңә бик тә ярҙам итте, — ти Зөлфиә. — Ҡайһы саҡ шулай уйлап ҡуям: ниңә йырсы түгелмен икән, тип. Сөнки мин сәхнәлә ул яҙған көйҙәргә бейейем, ә Рөстәм сәхнәгә сыҡмай ҙа тиерлек. Мин йырсы булһам, аккомпаниатор булараҡ ул да сәхнәгә сығыр ине, моғайын.

Зөлфиә Ҡудашева башҡарған бейеүҙәрҙе башҡаларҙыҡы менән бутау мөмкин түгел. Башҡорт ҡыҙҙарының саялығын, уңғанлығын, таҫыллығын, һомғоллоғон сағылдырған «Һыбайлы һылыу» бейеүен (Н.Осипов ҡуйған) нисек оноторға мөмкин. Һуңынан күпме ҡыҙҙар ошо бейеүҙе сәхнә күркенә әйләндереүен һанап бөтөрлөк түгел. Ә Зөлфиә Ҡудашеваның «Йәштәр вальсы» кемдәрҙең генә күңелен арбаманы икән: күпме дәрт, ҡөҙрәт, илаһилыҡ та, самимилыҡ та сағыла унда. Шулай ҙа «Батмустар менән бейеү»ен (Л.И.Нагаева ҡуйыуында) уның ижад күгендәге иң сағыу мәл тип әйтергә мөмкин. Тап ошо бейеү Зөлфиә Ҡудашеваны бөтә Союз күләмендә таныулы итте лә инде.

... 1979 йылдың апрелендә Кишиневта эстрада бейеүҙәренең Бөтә Союз фестивале үтә. Шуныһы иғтибарға лайыҡ: жюри рәйесе Мәхмүд Эсамбаев булып сыға. Ошо фестивалдә Зөлфиә лә ҡатнаша һәм «Батмустар менән бейеү»ҙе һәм «Шаян килен»де башҡарып, фестиваль лауреаты тигән исемде яулай, ул ғына ла түгел, «Мисс фестиваль» — «Фестивалдең иң күркәм һәм мөләйем ҡатын-ҡыҙы» тигән исемгә лайыҡ була. М.Эсамбаев батмустар менән бейеүҙе «Башҡорт сувениры» тип атай.

Шулай итеп, был бейеүҙең яңы исеме барлыҡҡа килә, ә Зөлфиә Ҡудашеваға БАССР-ҙың атҡаҙанған артисткаһы тигән маҡтаулы исем бирелә.

Зөлфиәнең бейеүсе Гүзәл Мамина менән берлектәге бейеүҙәре хаҡында ла әйтеп үтмәй булмай, сөнки улар үҙҙәренең халыҡсанлығы, бай йөкмәткеле булыуы менән айырылып тора. Гүзәл менән икәүләп ҡытай, һинд, испан ҡыҙҙары бейеүҙәрен дә үҙҙәренә генә хас нескәлек, маһирлыҡ менән башҡарыуға өлгәште улар. Ә күренекле фольклорсы, ғалимә Розалиә Солтангәрәева ҡуйған «Тыпандыҡ» бейеүен Рәсүл Ҡарабулатов менән башҡарып, Зөлфиә тамашасыларҙы тағы бер таң ҡалдырғайны.

Үҙенең оҫта бейеүсе икәнлеген байтаҡ сит илдәргә лә танытты Зөлфиә. 1979 йылда Фәйзи Ғәскәров исемендәге халыҡ бейеүҙәре ансамбле менән Чехословакияға барҙы. Артабан бейеүсе һуҡмаҡтары уны океандар аша Перуға алып китте. Уның бейеүенә Төркиә, Сүриә, Италия, Германия, Австрия, Швейцария, Голландия тамашасылары ла алҡышланы. Башҡорт халҡының бай күңел хазинаһын илдән-илгә, ҡитғанан-ҡитғаға өләште Зөлфиә. Ул ғына ла түгел, үҙе лә өр-яңы бейеүҙәр өйрәнеп ҡайтты, оҫталығы камиллаша барҙы.

Һәр яҡлап уңды Зөлфиә: сәхнәләш дуҫтарынан да, тормош юлдашынан да. Ире Рөстәм Рафиҡ улы Ҡудашев менән парлашып сәнғәт юлынан атлайҙар. Таянысы ла, ҡыуанысы ла ул Рөстәме. Кәрәк икән, яңы бейеү һалыша, кәрәк булһа, көйөн яҙа. Пар ҡанатлы ижад юлы уларҙы һәр саҡ алға, юлға, яңы уңыштарға әйҙәй. Һәр саҡ шулай булһын!